“01” 11 № 2

протоколы менән педагогтар советы ултырышында
Ҡабул ителде

“18-се башҡорт балалар баҡсаһы” МАББУ
мөдире _____ / Э.Б. Хисамова
№103 бойороҡо менән “01” 11.2019 йыл

Раҫланды

Өлкәндәр төркөм балалары өсөн комплекслы – тематик план.

тема	Үткәреү ваҡыты	Эш йөкмәткеһе	Ойоштороу формалары	Йомғаҡлау саралары варианттары
Белем көнө	Сентябрҙең 1-се аҙнаһы	Тирә-йүнде танып белеү һәләтен үҫтереү, уҡырға әҙерлек эштәре алып барыу, мәктәпкә һәм китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларға уҡырға кәрәклектең әһәмиәтен, мәктәптең мөһимлеген, мәктәп кәрәк-яраҡтары тураһындағы белемдәрҙе байытыу. Уҡытыусы һәм «уҡыусы» һөнәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм ыңғай ҡараш тәрбиәләү.	СРУ “Балалар баҡсаһы”. Тема буйынса әңгәмәләр. Физминуткалар өйрәнеү.Дидактик уйындар: Был әйбер кемгә кәрәк? Тиҙерәк йый. Танып бел.Шиғырҙар уҡыу, ятлау. Йырҙар өйрәнеү.	Балалар баҡсаһында белем байрамы.
Ғаиләм - ҡәлғәм	2-се аҙна	Ғаилә, ҡиммәт төшөнсәһенә аңлатма биреү; Күргәҙмәлелек аша балаларҙың телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү; Балаларҙа кешелеклелек, әҙәплелек, өлкәндәргә ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.	Шәжәрәләр менән танышыу. СРУ Ғаилә. Дидактик уйындар: Беҙҙең ғаилә, Наҙлы һүҙҙәр. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Әкиәттәр тыңлау. Фотоһүрәттәр ҡарау. Тәрбиә, ғаилә мөнәсәбәттәре буйынса мәҡәлдәр.	Балалар эштәренән күргәҙмә (ғаилә ағзаларының портреттары) Шәжәрә.
Юл хәүефһеҙлеге	3-сө аҙна	Юл ҡағиҙәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү, юл	Юл хәүефһеҙлеген һаҡлау буйынса тематик	

ҡағиҙәләре		билдәләре тураһында белемдәрен нығытыу. Юл ҡағиҙәләрен һаҡлаусы инспекторҙар тураһында белемдәрен арттырыу.	сара. Дидактик уйындар: Светофор, Юл билдәләре. Юл ҡағиҙәләре – беҙҙең дуҫтар! Хәрәкәтле уйындар: Ер аҫтынан йөрөү урыны аша үтеү(подземный переход) Такси. Юл ҡағиҙәләренә ҡағышлы йомаҡтар.	
Хеҙмәтенә күрә хөрмәте. (Уҡытыусы һәм тәрбиәсе хеҙмәте)	4-се аҙна	Тәрбиәләнеүселәрҙе уҡытыусы һәм тәрбиәсе һөнәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Педагог , уҡытыусы һәм тәрбиәсе хеҙмәтенә хөрмәт тәрбиәләү.	СРУ Мәктәп. Балалар баҡсаһы. Һүрәт эшләү:Минең яратҡан тәрбиәсем. Әңгәмә: балалар баҡсаһында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр. Йыр йырлау: тәрбиәсе,уҡытыусы тураһында. Дидактик уйындар: Был предмет ниндәй һөнәргә тап килә? Ҡотлау открыткаларын эшләү	Минең яратҡан тәрбиәсем! – күргәҙмә. Балалар баҡсаһы эшмәкәрҙәре айҡанлы байрам концерты.
Алтын көҙ	Октябрь 1-се аҙна	Көҙ етте (Көҙ тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү)	Тәбиғәт ҡанунына ярашлы ҡағиҙәләрҙе	“Башҡортостанда алтын көҙ”- күңел

		Минең тыуған ҡалам. Тәбиғәтте һаҡлау. Йәнһеҙ тәбиғәт тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, үҫемлектәрҙең һәм йәнлектәрҙең тәбиғәттең көҙгө шарттарына яраҡлашыуҙары тураһында белемдәрҙе, ябай кимәлдәге төшөнсәләрҙе формалаштырыу.	ныҡытыуға әңгәмә. Д/у “Был ниндәй ағас?”, “Күсмә ҡоштар”. Рәсем төшөрөү: Көҙгө урман. Көҙ тураһында шиғырҙар ятлау, һынамыштар,мәҡәлдәр уҡыу.	асыу.Милли ризыҡтар йәрминкәһе
Башҡортостан-Гөлбостан	Октябрь 2-се аҙна	Тыуған ил тураһында төшөнсәләр киңәйтеү.Башҡортостандағы ҡалалалар тураһында балаларҙың белемен киңәйтеү. Башҡортостандың төрлө милләт халыҡтары, мәҙәниәте, теле, ғөрөф-ғәҙәте буйынса балаларға белемдәр биреү.	Сюжетлы-ролле уйындар “Мин сәйәхәтсе”. Дидактик уйындар: “Ҡыҙыл китап”, “Үҫемлекте таны” “Файҙалы ҡаҙылмалар” h.б. энциклопедиалар менән эш.	Иртәлек “Башҡортостан-нурлы ил”.
Икмәк-ил байлығы	Октябрь 3-сө аҙна	Икмәктең көҙгө байлыҡ, көҙгө муллыҡ икәнен аңлатыу, уның тормош сығанағы икәнен төшөнөү.Балаларҙа игенсе хеҙмәтенә хөрмәт тәрбиәләү. Балаларҙың аҙыҡҡа ҡарата ихтирамлыҡ, иғтибарлыҡ, һөйөү тойғоһон тәрбиәләү.	Сюжетлы-ролле уйындар “Ғаилә”.Тема буйынса әңгәмәләр.Нәфис әҙәбиәт уҡыу “Йоморо икмәк”	“Икмәк-тормош сығанағы” балалар ижадынан күргәҙмә.
Моңдаръя-Сөмбөлә	Октябрь 4-се аҙна	Музыка сәнғәте төрҙәре менән таныштырыу, нәфис-эстетик үҫеш, музыка эшмәкәрҙәр ижады менән	Сюжетлы-ролле уйын “Өс сәскә” , Мин композитор” ,дидактик	Байрам “Сөмбөлә”.

		таныштырыуҙы дауам итеү. Сәнғәтенә һөйөү уятыу, композитор, музыка ҡоралдары менән таныштырыуҙы дауам итеү.	уйын “Ритм буйынса тап” “Көйҙө бел” Әңгәмә “Музыка сәнғәте”	
Дуҫлыҡ ептәре	Ноябрь 1-се аҙна	Тыуған ил һәм уның байрамдары тураһындағы төшөнсәләрҙе дөйөмләштереү. Тыуған илдең тарихына ҡыҙыҡһыныу үҫтереү, тыуған илгә ҡарата ғорурлыҡ һәм һөйөү тәрбиәләү. Рәсәйҙең, Башҡортостандың тарихы, гербы, флагы, гимны менән таныштырыу. Рәсәй ҙур һәм төрлө милләтле ил тураһында мәғлүмәт биреү. Рәсәйҙең баш ҡалаһы Мәскәү менән таныштырыу. Өфө – беҙҙең баш ҡала.	Фотокүргәзмә: “Тыуған илебеҙ – Рәсәй”. Дидактик уйын “Флагты тап”, “Берҙәмлек”, “Был ниндәй халыҡтың гербы”, “Был ҡала ҡайҙа урынлашҡан?”, Презентация , видеояҙмалар ҡарау. Әңгәмә “Ниндәй илдәр беләһең?” Гимн тыңлау. “Был ҡайҙа- Мәскәуҙәме, әллә Өфөләме?”	«Башҡортостан – минең республикам”- байрам. Конкурс
Башҡорт халыҡ ижады	Ноябрь 2-се аҙна	Башҡорт халыҡ мәҙәниәте, йолалары һәм һынлы сәнғәте менән таныштырыуҙы дауам итеү, һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, халыҡ сәнғәте төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт һәм рус халҡының йәшәгән йорттары (тирмә, изба), уның төҙөлөшө, милли кейемдәре, йорт кәрәк-яраҡтары, һөнәрҙәре менән	Башҡортостандың, йәки райондың милли музейына “сәйәхәт”. Һынамыштар, мәҡәлдәр ятлау. Дидактик уйындар “Өлөштән бөтөндө төҙөү”(5-6өлөш) Башҡорт биҙәген төҙө” Иллюстрациялар предметлы һүрәттәр	Башҡорт халыҡ әкиәте “Һарыбай”ҙы сәхнәләштереү.

		таныштырыу. Башҡорт халыҡ ижады менән танышыу,	менән эш. Уҡыу өсөн башҡорт халыҡ әкиәттәре “Һарыбый” “Ирәндек” “Алдар батыр”	
Халҡым биҙәктәре	Ноябрь 3-сө аҙна	Балаларҙы башҡорт халҡының сәнғәте, мили башҡорт орнаменты менән таныштырыу. Орнаменттың мәғәнәһен асыҡлау, уның үҙенсәлеге менән танышыу. Тәрбиәләнеүселәр күңелендә милли ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү. Тарих менән танышыу.	Презентация “Башҡорт халыҡ милли биҙәктәре” Күргәҙмә: “Халыҡ сәнғәте” Рәсем эшләү “Башҡорт халыҡ орнаменттары” Ювелир эштәр, туҡымаларҙы биҙәү, төрлө төҫтә мозаика күн аяҡ кейемдәре.	Асыҡ дәрес “Биҙәктәрҙә халҡым тарихы”
Әсәйҙәр көнө	Ноябрь 4-се аҙна	Әсәйгә ҡарата хөрмәт һәм һөйөү тәрбиәләү, уның тураһында ҡайғыртырға, ярҙам итергә кәрәклеген аңлатыу. Ғаилә, уның тарихы, ата-әсәйҙәрҙең шөғөлө һәм һөнәрҙәре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтеү.	СРУ “Әсәйемдең һөнәре” Д/У “Айырып һал” “Ярай-ярамай” “Наҙлы һүҙҙәр” Нәфис әҙәбиәт уҡыу, йырҙар тыңлау, өйрәнеү, фотоһүрәттәр ҡарау. Ситуациялы һөйләшеүҙәр.	Күргәҙмә “Әсәйем портреты”
Һаумы, ҡыш!	Декабрь 1-се аҙна	Ҡышҡы тәбиғәт, ҡыш миҙгеленең билдәләре (һыуыҡ, ҡар яуа, һыуыҡ ел иҫә,туңдыра) тураһындағы	Дидактик уйындар “Был ҡасаҡ була?” , “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ” “Ҡыш	Балалар эштәренән күргәҙмә “Гәлсәр

		белемдәрҙе киңәйтеү һәм байытыу. Ҡала һәм ауылда йәшәүсе халыҡтың тормошондағы ҡышҡы үҙгәрештәр тураһында аңлатыу. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.	билдәләрен әйт” “Хәуефһеҙлек ҡағиҙәләре” Был ниндәй спорт төрө” Мнемотаблица менән эш. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, ҡыш тураһында шиғырҙар ятлау. Ҡышҡы хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары уйнау. Ҡышҡы ярыштар. Ҡар , һыу, боҙ менән тәжрибәләр үткәреү.	ҡыш”
Әсәм теле – сәсән теле!	Декабрь 2-се аҙна	Балаларҙа туған тел, халыҡ йырҙары аша тыуған еребеҙгә телебеҙгә, уның гүзәл тәбиғәтенә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, горурланыу тойғоһо уятыу, фекерләү ҡеуәһен үҫтереү. Р.Ғәрипов, М.Кәримдең башҡорт теленә арналған ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү.	Түңәрәк өҫтәл “Әсәм теле-сәсән теле” туған тел тураһында шиғырҙар уҡыу-ятлау	Башҡорт теленә арналаған иртәлек.
Ҡышҡы биҙәктәр.	Декабрь 3-сө аҙна	Тәбиғәт күренештәре тураһында балаларҙың белемен тәрәнәйтеу(ҡар,бәҫ , боҙ) Балаларҙа эстетик күнекмәләрҙе камиллаштырыуҙы дауам итеү, ижади күҙ аллауҙарын үҫтереү.	Ҡышҡы биҙәктәр төшөрөлгән рәсемдәр ҡарау,ҡар бөртөктәрен киҫеп йәбештереү. Төркөмдө яңы йылға биҙәү.	Ҡышҡы биҙәктәр иленә сәйәхәт – дәрес

		Ҡышҡы тәбиғәттең матурлығына һоҡлана белеү сифаттары тәрбиәләү.	Әкиәт уҡыу “Ҡышҡы сәскәләр” –З.Вакказова	
Яңы йыл	Декабрь 4-се аҙна	Байрамдар тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү, Яңы йыл байрамына бергәләп әҙерлек үткәреү, күтәренке кәйеф булдырыу. Яҡындары өсөн үҙ ҡулдары менән бүләк эшләп, уларҙы ҡотларға күнектереү, бергәләп эш итеү барышында әхлаҡи холоҡ сифаттарын тәрбиәләүҙе дауам итеү, башҡа илдәрҙә Яңы йыл байрамдары нисек үтә, шулар менән таныштырыу	Д/у “ ҡышҡы байрамдар”, “Ҡышҡы уйындар” , “Һүҙҙәр теҙмәһе” “Шыршы ҡайҙан беҙгә килгән” Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү, яңы йылға шиғырҙар ятлау. Шыршы байрамына уйынсыҡтар әҙерләү. Яңы йыл тарихы менән таныштырыу.	Байрам: «Яңы йыл шыршыһының мажаралары».
Нардуған	Ғинуар 2-се аҙна	Балаларҙы башҡорт халыҡ йолалары,ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, “Нардуған” байрамы , Селлә ваҡыты менән танышыу.байрамдың исемен , ғәмәлен атай белергә өйрәтеү. Байрамға ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү.	Йомаҡтар , әйтемдәр, һынамыштар өйрәнеү. “Дуҫлыҡ” бейеуен өйрәнеү. Хәрәкәтле уйындар “Әйләнәйек” “Туңдырам”. Йыр өйрәнеү “Ал, бәйлә ҡулыңа” Тәбиғәткә маҡсатлы прогулка.	“Нардуған” - фотокүргәзмә ойоштороу.
Изгелек аҙнаһы	Ғинуар 3-сө аҙна	Балаларҙы дуҫтарға, яҙындарға, туғандарға, ололарға ярҙам ҡулы	Әңгәмә, викторина : “кешеләр яҡшылыҡ	Изгелек дәресе “Яҡшылыҡ ерҙә

		hуҙырға өйрәтеү. Йылы ,яғымлы hүҙҙәр менән телмәрҙе байытыу.Яҡшы кәйеф булдырыу.	эшләр өсөн тыуа”, “яҡшылыҡ эшләргә ашыҡ”. Дидактик уйын “Ҡоштар беҙҙең дуҫтар” “Яҡшы hүҙ яман hүҙ”	ятмай”. Ҡоштарға тағараҡтар эшләп элеү
Ҡышҡы уйындар	Ғинуар 4-се аҙна	Ҡыш темаһына ҡараған лексиканы иҫкә төшөрөү.Ҡышҡы уйын төрҙәрен өйрәнеү.Сәләмәт йәшәү рәуеше, дуҫлыҡ хисе тәрбиәләү.Балаларҙа яҡшы кәйеф тыуҙырыу.	Хәрәкәтле уйындар: сана, саңғы шыуыу, “Тау батшаһы” “Ҡар шары” менән ярыш.”Ҡыңғырау” уйыны Д/у “Кроссворд”, “Эҙлә, тап” Майҙансыҡтағы ҡарҙан спорт ҡоролмаларында ярыштар	Ҡышҡы эстафета.
Фән hәм ғилем	Февраль 1-се аҙна	Балаларҙа фәнгә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятыу. Опыт ,эксперимент үткәреү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу. Тирә-йүнгә hаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.Балаларҙың актив эшмәкәрлеген үҫтереү.	Эксперимент, опыттар үткәреү . СРУ “Лаборант” Дидактик уйын “Һайлап ал” “Еҫенән бел”,”Үҫемлектәрҙең төрҙәре”, “Ҡайсан була?” Әңгәмәләр үткәреү.	Асыҡ дәрес үткәреү.
Ҡышҡы урман	Февраль 2-се аҙна	Ҡыш миҙгеле турайында белемде тәрәнәйтеү. Урмандағы ҡышҡы хайуандар	Дидактик уйын “Урман хайуандары”, “Был кемдең эҙе?” “Кем нисек	Тәбиғәт материалдарынан эшләнгән ҡул

		менән таныштырыу Балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләү. Тәбиғәтте күҙәтеү,тәбиғәткә һөйөү,һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.Тирә-йүн, тәбиғәт һәм йәмғиәт күренештәре тураһында белемдәрҙе дөйөмләштереү,кеше һәм тәбиғәттең бер-береһенә тәъҫире тураһындағы төшөнсәләрҙе формалаштырыу, уратып алған предметтарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү	ҡышлай?”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, мәҡәлдәр өйрәнеү, йомаҡтар сисеү.	эштәре күргәҙмәһе: “Оҫта ҡулдар”
Ватанды һаҡлаусылар көнө	Февраль 3-сө аҙна	Балаларҫың армия тураһында белемдәрен киңәйтеү.Тыуған илде һаҡлау- ул ир-заттарҙың бурысы икәнен аңлатыу.Тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.Төрлө хәрби һөнәрҙәр менән таныштырыу: йәйәүле армия, диңгеҙ һуғышсандары, танк ғәскәре, хәрби техника менән таныштырыуҙы дауам итеү. Гендер тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү.	Сюжетлы-ролле уйындар “Ил һаҡсыһы”, “Осоусылыр”. Дидактик уйындар “Транспорт төрөн атап әйт” “Флагты төҙө”, “Тышҡы күренеш буйынса төркөмлә”, “Был ниндәй ғәскәр”, “Эшләп бөтөр”, “Айырып һал”, “Айырып һал”. Иҫтәлекле урындарға экскурсиялар.Йәмәғәт транспорттарын күҙәтеү.Маҡсатлы	Атайҙар ҡатнашлығында музыкаль- спорт байрамы “Ир бала-илгә терәк”

			прогулкалар.Фотокүргәзмә ойоштороу “Олатайым миҙалдары”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу, шиғырҙар ятлау, йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү.Йомаҡтар сисеү.Батырлыҡ тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү.	
Хеҙмәт-тормош сығанағы	Февраль 4-се аҙна	Балаларҙы хеҙмәткә күнектереү, йәмғиәткә ниндәй файҙа килтерәсәге тураһында әңгәмә ҡороу. Хеҙмәт барышында шатлыҡ хистәре кисереү.Өлкәндәр хеҙмәтенә хөрмәт тәрбиәләү, ололарға ярҙам ҡулы һуҙырға теләк уятыу. Төп профессиялар менән таныштырыуҙы дауам итеү.Көндәлек хеҙмәттә ҡатнашыу, активлыҡ тәрбиәләү.	СРУ “Бөҙрәхана”, “Почта”. Дидактик уйын “Ярҙам ит”, “Был ниндәй һөнәр эйәһе?”. Әҙәп-гигиена тураһында әңгәмә. Мәҡәл, әйтемдәр өйрәнеү, ятлау.Төҙөлөш материалдары менән төҙөүсе һөнәрен үҙләштереү.	“Мин үҫкәс кем булам?” рәсем күргәзмәһе.
Әсәйем-бергенәм	Март 1-се аҙна	Әсәҙәргә, өләсәйҙәргә ҡарата ҡәҙер-хөрмәт тәрбиәләү.Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.Әсә кешенең йәмғиәт ағзаһы булараҡ ,үҙенә генә хас сифаттары, башҡарған эшэ	СРУ “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”, “Магазин”, “Больница” “Тәрбиәсе”, “Ателье” Дидактик уйындар “Кем күберәк наҙлы һүҙ	Иртәлек “Ил биҙәге-ҡатын ҡыҙ” Балалар эштәренән күргәзмә

		тураһында төшөнсәләр биреү. Гендер тәрбиәһе буйынса балаларҙың белемдәрен киңәйтеү.	әйтер?” “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”. Мнемотаблицалар менән эш.	
Өләсәйем һандығы.	Март 2-се аҙна	Башҡорт халҡының изге байрамдарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен иҫкә төшөрөү һәм һаҡлау, элекке осорҙоң матурлығын күрһәтеү, балаларҙы башҡорт халҡының йырлы-бейеүле уйындарына уйындарына ауыҙ-тел ижадына мөхәббәт уятыу.Башҡорт халҡыны иғтирам, ғорурлыҡ хистәре тәрбиәләү.	Өләсәй тураһында йыр тыңлау һәм ятлау,шиғырҙар, таҡмаҡтар өйрәнеү. Плакат “үткәнен оготҡан халыҡтың- киләсәге юҡ” Балалар баҡсаһы эсендә мини музейға сәйәхәт. Боронғо йолалар тураһында әңгәмә. Башҡортхалыҡ уындары менән танышыу, уйнау(“Түбәтәй” “Йөҙөк һалыу” уйыны)	Китап күргәҙмәһе “халҡыбыҙҙың күңел биҙәктәре”
Яҙ килде	Март 3-сө аҙна	Яҙ тураһында белем кимәлен байытыу Яҙғы тәбиғәттең матурлығын күрергә өйрәтеү. Сезон күренештәре, тәбиғәттә үҙ – ара бәйләнеш тураһында күҙаллауҙар киңәйтеү. Яҙ миҙгеле, үҫемлектәр һәм йәнлектәрҙең миҙгелгә ҡарап үҙгәреүе тураһындағы белемдәрҙе	Яҙ тураһында һынамыштар, әйтемдәр, мәҡәлдәр ятлау; шиғырҙар өйрәнеү.Йырҙар тыңлау. Мнемотаблицалар менән эш. “Яҙгы урман”һүрәт эшләү. Яҙға хас булған	Тематик күңелде асыу сараһы “Яҙ килә, яҙ көлә” Балалар эштәренән күргәҙмә

		дөйөмләштереү. Яҙ миҙгеленең билдәләре (ҡар ирей, ҡоштар йылы яҡтан осоп ҡайта, ҡояш йылыта h.б.), йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттең бәйләнеше. Ҡоштар донъяһы тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү.	күренештәр тураһында әңгәмәләр, рәсемдәр ҡарау; урамда күҙәтеүҙәр үткәреү. Тәҙрә төптәрендә үҫентеләр ултыртыу. Сыйырсыҡ оялары элеү. Дидактик уйын “Күсмә ҡоштар” “Умырзая” Хәрәкәтле уйын “Күләүектәр аша һикерәбеҙ” “Ҡояш һәм ямғыр” “Боҙ эрей” “Сәскәләр” бейеуе өйрәнеү	
Театр аҙнаһы	Март 4-се аҙна	Театр сәнғәте менән таныштырыу, нәфис-эстетик үҫеш, театр эшмәкәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү Балаларҙың театр сәнғәте үҙләштереү, ижади сәнғәтен үҫтереү, сәнғәткә һәм мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Әкиәттәр менән ҡыҙыҙыҡһыныу үҫтереү. Әкиәт геройҙарының хис тойғоларын дөрөҫ тасуирлай белергә өйрәтеү.	СРУ “Ҡурсаҡ театры”. Дидактик уйын “Театр төрҙәре” “Мин актер” “Тылсымлы ҡурсаҡтар” Хәрәкәтле уйын “Күңелле хәрәкәттәр”, “Геройҙың мимикаһын аңлат” Әңгәмә “Өфө театрҙары”. Балалар менән телмәр үҫтереү буйынса күнекмәләр эшләү. Тиҙәйткестәр , тел	“Гөлбикә” әкиәтен сәхнәләштереү.

			төҙәйткестәр, бармаҡ уйындары өйрәнеү. Әҙәби викторина.	
Китап-белем шишмәһе	Апрель 1-се аҙна	Китап тураһындағы белемдәрен тулылындырыу, нығытыу, үҙ ҡулдары менән китаптар эшләу. Балаларҙың логик фекерләү һәләтен, ижади эшсәнлеген үҫтереү. Шиғри юлдар, мәҡәлдәр аша туған телебеҙгә ҡарата иғтирам мөхәббәт тәрбиәләү, уның менән ғорурланыу хистәре булдырыу. Төрлө яҙыусылар, шағирҙар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Китапҡа һаҡсыл ҡараш уятыу.	Әҙәби китаптар уҡыу, китап тураһында шиғырҙар ятлау, мәҡәлдәр өйрәнеү. Плакат карау “Белем алам тиһәң- һөй, хөрмәт ит, ярат китапты”(.Ғ.Туҡай) СРУ “Китапхана”, Китапханасы һөнәре менән таныштырыу.Төрлө авторҙар , яҙыусылар менән таныштырыу. Дидактик уйын “Китап төрҙәре”	“Минең яратҡан китабым” темаһына рәсемдәр күргәзмәһе.
Космонавтар көнө	Апрель 2-се аҙна	Балаларҙы космонавтика көнө менән таныштырыу, үҙләштереү. Космосты үҙләштергән бөйөк кешеләр тураһында мәғлүмәт биреү. Ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, үҙ илең менән ғорурланыу хисе тәрбиәләү Беренсе космонавт тураһында белемдәрен киңәйтеү, планеталарҙы	Космос тураһында әңгәмә үткәреү, фото-һүрәттәр ҡарау, шиғырҙар уҡыу. СРУ “Космонавт”. Дидактик уйын “Йондоҙло сәғәт” “Йыһан киңлеге”,“Кем оса?”	Конкурс “Гагаринцылар”

		өйрәнеү.		
Ер көнө	Апрель 3-сө аҙна	Тәбиғәттең байлығы менән таныштырыуҙы дауам итеү.Балаларҙың тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш үҫтереү.Ер планетаһы тураһында белемдәрен байытыу. Ҡоштарға , йәнлектәргә , үҫемлектәргә ярҙам итеү теләге уятыу.Экологик белемдәрен байытыу.	Тәбиғәт тураһында йомаҡтар сисеү. Хәрәкәтле уйын “Сүп-сарыңды ал” Дидактик уйын “Әйе ,юк” Әңгәмә “Экологик тәрбиәләү”, “Космос менән таныштырыу”	Һүрәттәр конкурсы “Ер беҙҙең йорт”
Халҡым йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре	Апрель 4-се аҙна	“Ҡарға бутҡаһы”, “Кәкүк сәйе” йолаларының уйын элементтары менән таныштырыу: һамаҡтар, һанашмаҡтар, йомаҡтар, әүрәткестәр.Башҡорт халыҡ мәҙәниәте, йолалары һәм һынлы сәнғәте менән таныштырыуҙы дауам итеү, һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, халыҡ сәнғәте төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт халҡының йәшәгән йорттары (тирмә), уның төҙөлөшө, милли кейемдәре, йорт кәрәк-яраҡтары, һөнәрҙәре менән таныштырыу.	Ата – әсәләр ярҙамында әҙерләнгән “Ҡарға бутҡаһы” йәки “Кәкүк сәйе” фольклор байрамында ҡатнашыу. Иллюстрациялар, видеояҙмалар ҡарау. Йолаларға ҡағылышлы төрлө эшмәкәрлектәр ойоштороу.	Төркөмдә ата-әсәләр ярҙамында мини-музей төҙөү “Башҡорттарҙың йәшәү көнкүреше”
Еңеүгә дан	Май 1-се аҙна	.Балаларҙа Ватанға ҡарата һөйөү тойғоларын уятыу һәм патриотик	Батырҙарға арналған төрлө эшмәкәрлектәр	Тематик сара “Мин– башҡорт

		тәрбиә биреү, Бөйөк Ватан һуғышы һәм уның батырҙары тураһындағы белемдәрен киңәйтеү, һуғыш батырҙары һәйкәлдәре менән таныштырыу. Еңеү байрамы тураһында тәү төшөнсәләр биреү. Милли геройҙар тураһында күҙаллауҙар үҫтереү.	ойоштороу . Шиғырҙар , йырҙар “Олатайым миҙалдары”, “Ерҙән һалдат атлай” “Мәңгелек ут” ятлау. Бейеүҙәр өйрәнеү. Һуғыш ветерандары тураһында әңгәмә ҡороу. Бөйөк Ватан һуғышы темаһына слайд ҡарау.	тоҡомонан!” Олатайҙарҙың фото-һүрәтенән күргәзмә
Халҡымдың шөғөл-кәсептәре	Май 2-се аҙна	Балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәниәтен, шөғөл-кәсептәрен өйрәнеүҙе дауам итеү. Балаларҙа милли мәҙәниәттең тәү сығанағын өйрәнеүгә нигеҙ булдырыу; солоҡ-солоҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ эштәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙың телмәрен, иғтибарлыҡтарын үҫтереү; һүҙлек запасын байытыу. Үҙ милләтеңә, теленә, шөғөл-кәсептәренә һөйөү тәрбиәләү.	Халыҡтың шөғөлө тураһында әңгәмә үткәреү. Дидактик уйын “Нимә артыҡ”, Лото,ребустар сисеү. Китаптарҙан иллюстрациялар ҡарау. Видеояҙма менән таныштырыу. СРУ “Умартасылыҡ”	Башҡорт халҡының шөғөл кәсептәренә арналған мөйөш булдырыу.
Милли ризыҡ	Май 3-сө аҙна	Аҙыҡ-түлек, ашамлыҡтар исемдәрен үҙләштереүҙәрен нығытыу, телмәрҙә	Дидактик уйын “Ниндәй милләт ризығы?”	Балаларҙың үҙ ҡулдары менән

		дөрөҫ әйтергә, ҡулланырға өйрәтеү; үҙ-үҙеңде йәмәғәт урындарында әҙәпле тоторға өйрәтеү; әҙәплелек, ярҙамсыллыҡ кеүек ыңғай сифаттар тәрбиәләү.	СРУ “Минең әсәйем ашнаҡсы” Башҡорт милли ризыҡтарының тарихы менән таныштырыу. Һүҙлек запасын байытыу:сәк-сәк, бишбармаҡ, ҡорот, айран “Бишбармаҡ” бейеуен өйрәнеү.	тоҙло ҡамырҙан башҡорт халыҡ ризыҡтарын әүәләү.
Һаумы, йәй	Май 4-се аҙна	Йәй миҙгеле тураһында белемдәрен арттырыу,тәбиғәттәге сезон үҙгәрештәре менән таныштырыу.Телмәр аппаратын үҫтереү.	Йәйге аҡланда” темаһына аудиозапись тыңлау Йәй миҙгеленә ҡарата картиналар ҡарау Йомаҡтар, әйтемдәр өйрәнеү. Д/у “Был ниндәй миҙгел” “Был касан була” “Нимә артыҡ?” Х/у “Күбәләк”.	Фото күргәҙмә “Һаумы, йәй”
Бәхетле бала саҡ	Июнь 1-се аҙна	Балалар ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү.Бер-береһенә ҡарата дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.	Бадла-саҡ тураһында шиғырҙар уҡыу. Йырҙар ятлап, йырлау.Бейеүҙәр өйрәнеү. Х/у “Аҡ тирәк, күк тирәк”. Аҡбур менәр асфальтта һүрәттәр эшләү.	“Бәхетле бала-саҡ иле”- саф һауала күңел асыу.

С.Юлаев-башҡорт халҡының милли батыры	Июнь 2-се аҙна	С.Юлаев тураһында ғилми хеҙмәттәр һәм әҙәби әсәрҙәр менән таныштырыу. С.Юлаев башҡорт халҡының милли геройы, шағиры икәнлеген аңлатыу.	С.Юлаевтың тормош юлы менән таныштырыу. “Уралым” (С.Юлаев) шиғырын ятлау.С.Юлаев тураһында нәфис фильмдың өҙөгөн ҡарау. Уның скульптуралары, картиналарын күҙәтеү С.Юлаевтың монументаль скульптураһы менән танышыу. С.Юлаевҡа арналған презинтация	С.Юлаевҡа арналған һүрәттәр күргәзмәһе
Пушкин көндәре	Июнь 3-сө аҙна	А.С.Пушкиндың ижады менән таныштырыу, ҡыҙыҡһыныу уятыу, балаларҙың телмәрен үҫтереү. Китаптарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәү	Әҙәбиәт уҡыу, әкиәттәо һөйләү, аудиозапись тыңлау,өҫтәл уйыны “Картинаны йый”. Д/у “Кем ҙурырыҡ” “Кемдән телеграмма килгән”(А.С.Пушкиндың әкиәттәре буйынса) Әкиәттәр буйлап вертуаль сәйәхәт “Ниндәй ғәжәйеп был әкиәттәр”	Уйын-викторина “Әкиәт иле”
Дуҫлыҡ	Июнь 4-се аҙна	Дуҫ-дуҫлыҡ һүҙенең мәғәнәһен төшөндөрөү.дуҫтар тормашта	Дуҫлыҡ тураһында әңгәмә.	Коллектив һүрәт төшөрөү “Дуҫлыҡ

		ниндәй роль уйнағанын аңлатып китеү.Дуҫлыҡ ҡағиҙәләре менән таныштырыу.Диологик телмәр үҫтереү.Дуҫҡа ярҙам ҡулы теләген арттырыу.	Дуҫлыҡ тураһында әкиәттәр “Ете тажлы сәскә” Дуҫлыҡ тураһында шиғырҙар, мәҡәлдәр, йырҙар ятлау.	йомғағығы”
Нимә яҡшы, нимә насар	Июль 1-се аҙна	Баларҙы яҡшы эш ҡылырға өндәү. Яҡшы һәм насар һүҙҙәренең эстәлеген аңлатыу. Яҡшы һүҙҙәр менән тел аппаратын байытыу. Өлкәндәрҙе, тәрбиәселәрҙе хөрмәт итеү теләген уятыу.	Яҡшылыҡ һәм насарлыҡ тураһында әкиәттәр уҡыу, мәҡәлдәр өйрәнеү. Психогимнастика “Устар” Шиғыр ятлау В.Маяковский “Нимә яҡшы, нимә насар?”	“Минең яҡшы эштәрем” темаһына рәсем
Сәләмәт тәндә-сәләмәт рух.Йәйге уйындар	Июль 2- се аҙна	Баларҙың физик үҫештәрен нығытыу. Йәйге спорт уйындары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Сәләмәтлекте һаҡлау сараларын уятыу, спортҡа мөхәббәт тәрбиәләү.	Х/у “Кем етеҙ”, “Осто, осто” “Тотошмаҡ””Ак тирәк, күк тирәк” Спорт төрҙәре тураһында әңгәмә.	Спорт ярышы “күңелле эстофета”
Тәмлекәстәр көнө.	Июль 3 –сө аҙна	Тәмлекәстәрҙең файҙаһы һәм зыяны тураһында белемдәрен байытыу. Тәмлекәстәр байрамына әҙерлеккә ярҙам итеү теләген уятыу.Шәкәр тарихы менән таныштырыу.Ҡыҙыҡһыныу уятыу.	Әңгәмә “Тәмлекәстәр иле” Өҫтәл-баҫма уйын “Файҙалы һәм зыянлы”, “Бал” СРУ “Кафе” “Һорауҙарға яуап биреү. Д/у “Әкиәт геройҙарын иҫкә төшөр”	“Тәмлекәстәр көнө”- уйын байрам.

			Емеш-еләк тураһында йомаҡтар сисеү. Һүрәт төшөрөү “Минең яратҡан тәмлекәстәр”	
Урманда һаҡ бул	Июль 4- се аҙна	Балаларҙың интеллектуаль үҫешенә ирешеү, серле урманда йәшәүселәргә ярҙам итеү теләге уятыу. Әҙәплелек һәм әхлаҡ ҡағиҙәләренән тайпылмаҫҡа өйрәтеү. Тәбиғәт ҡосағында үҙ-үҙеңде әҙәпле тотоу ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Урманда күп ағастар, үҫемлектәр үҫеүе, йәнлектәр донъяһы бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә булыуын асыҡлау һәм аңатыу.	Тәбиғәт тураһында хикәйәләр уҡыу (М.Кәрим-Урманда) Картиналар, слайддар ҡарау, йомаҡтар сисеү. Д/у “Бәшмәктәр” “Ҡырағай хайуандар “ “Ашарға ярай- ярамай” СРУ “Урман батшалығы” Х/у “Бүрәнә аша һикереп сыҡ” “Айыу ,бүре юҡ икән”	Папка-передвижка “Урманда һаҡ бул”
Башҡорт халыҡ уйындары	Август 1-се аҙна	Балаларҙы башҡорт халыҡының мәҙәниәтен уйындарын өйрәнеүҙе дауам итеу. Балаларҙа милли мәҙәниәттең тәү сығанағын өйрәнеүҙә нигеҙ булдырыу, уйындарға ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙың телмәрен, иғтибарлыҡтарын үҫтереү.Һүҙлек запасын байытыу. Сослоҡ, йылдамлыҡ, иғтибарлыҡ	Хәрәкәтле уйындар “Ҡоймаҡ бешерәбеҙ” “Ҡарға бутҡаһы” “Һабантуй” “Кәкүк сәйе “” Йәшерәм яулыҡ” “Аҡ тирәк- күк тирәк” “Наза” “Йөҙөк һалыш” Һәр уйындың һынашмаҡтарын , таҡмаҡтарын өйрәнеү. Әңгәмә “Башҡорт халыҡ	Балалар һабантуйы байрамын үткәреү

		сифаттары , үҙ милләтенә, теленә, уйындарына һөйөү тәрбиәләү.	уйындары” Слайдтар ҡарау “Уйын төрҙәре” Д/у “Дөрөҫ ата”Уйын ҡағиҙәһе”	
Һөнәрле кеше	Август 2-се аҙна	Төрлө һөнәр эйәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Йәмғиәткә яраҡлы шәхес булып үҫергә ынтылыш биреү. Һөнәр эйәләренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу. Һөнәр:әр:ең нисек мөһим, кәрәкле булыуын аңларға ярҙам итеү	Әңгәмә “Ата-әсәйеңдең һөнәре”. Һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр уҡыу, һүрәттәр ҡарау Д/и “Кемгә нимә кәрәк”	“Мин киләсәктә кем булам?” һүрәттәр күргәҙмәһе.
Үҙ-үҙемде уйлайым, һаулығымды һаҡлайым	Август 3-сө аҙна	Һаулыҡ тураһында белемдәрҙе байытыу Сәләмәтлекте һаҡлау сараларын өйрәтеү. Сәләмәт йәшәү өсөн тормош рәүешенең ҙур әһәмиәткә эйә икәнен төшөндөрөү. Спортҡа мөхәббәт тәрбиәләү	Спорт төрҙәре тураһында презентация Әңгәмә “Сәләмәтлек иң ҙур байлыҡ” Д/у “Витаминдар”, “Гигиена талаптары” Саф һауала спорт уйындары Һүрәт ҡарау “Насар ҡылыҡтарҙы булдырмау” Х/у “Зарарлы-файҙалы”, “Мөғжизәләр яланы”, “Футбол”	Дәрес “Һаулыҡ – ҙур байлыҡ”
Һау бул , йәй!	Август 4-се аҙна	Йыл миҙгелдәренең сифаттарын ныҡытыу	Лато йәй миҙгеле. Дидактик уын “Һайлап	Йәйге композиция -күргәҙмә

		Тәбиғәттәге, һауа-торошоноң үҙгәрештәрен күрә белеү Ҡыҙыҡһыныу уятыу Тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү	ал” Әңгәмә “Йәй миҙгеленең аҙағы” П.И.Чайковскийҙың “Йыл миҙгелдәре репертуары” Йыр ятлау “Алтын ҡояш” Хоровод уйын “Ҡалпаҡ” Йомаҡтар сисеү. Хәрәкәтле уйын “Ҡояш-ямғыр”	